*Рәүеф ШАҺИЕВ,*
*филология фәндәре кандидаты*

# ЯҢЫ ҠАРАШ НИСЕК ТУПЛАНА?

Демократия елдәре башҡорт әҙәбиәтен дә яңы йүнәлешкә бороп ебәрҙе. Әҙәбиәт халыҡтың боронғо асылына мөрәжәғәт итеү юлында ыңғай уңыштарға өлгәште. Быға М.Кәримдең «Салауат», «Ай тотолған төндә», Н.Асанбаевтың «Ҡыҙыл паша», Ғ.Шафиҡовтың «Һәҙиә», Ғәли Ибраһимовтың «Кинйә», Яныбай Хамматовтың «Ҡара яу», Әхиәр Хәкимовтың «Дауылдан ҡотолоу юҡ», Булат Рафиҡовтың «Ҡараһаҡал», «Көнгәк», Роберт Байымовтың «Сыбар шоңҡар», Ғайса Хөсәйеновтың «Ҡанлы илле биш», Тайфур Сәғитовтың «Аманат», Рәшит Солтангәрәевтың «Осто бөркөт» һәм башҡа әҙиптәрҙең тарихи-героик роман-повестары, драмалары дәлил.

Яҙыусыларҙың халыҡтың ҡаһарман үткәненә, бығаса тыйылып килгән темаларға мөрәжәғәт итеүе тарихи ерлегебеҙҙәге рухи ихтыяждан килеп сыға. Тарихтың тәрән тамырҙар сылбыры бөгөнгө сәсмә, драма һәм поэтик әҫәрҙәрҙең төп идея-тематикаһын билдәләүсе көскә әйләнә бара.

Әҙәбиәт белгесе Ғ.Ҡунафин: «Милли йөҙөбөҙҙө, халыҡ булараҡ үҙ бәсебеҙҙе юғалтмаҫ өсөн беҙгә, башҡорттарға, йылдан-йыл күңелебеҙҙән китә, байыған ҡояш кеүек һүнә, тоноҡлана барған «рух яҙыуыбыҙ»ҙы һүң булмаҫ борон яңыртырға, уның бейек асылына төшөнөр, илаһи көсөн файҙаланыр өсөн «күпме сер һүтергә, ҡул һелтәмәй... уй тағатырға» кәрәк. Бик кәрәк»[1], — ти.

Милләтте милләт итеүсе рух асылы әҙәбиәтебеҙҙең һүнмәҫ маяғы булыуы мөһим. Беҙ замана килтергән ысынбарлыҡтың кире яҡтарына битараф ҡарарға тейеш түгелбеҙ. Сер түгел, тормошта әхлаҡһыҙлыҡ саф намыҫтан уҙҙырып бара. Әҙәбиәт — ул күңелдәрҙе таҙартыусы, сафландырыусы, изгелектең һары алтыны, рухи байлыҡ тыуҙырыусы. Тимәк, ижадсы бөтә нәмәнән өҫтөн тора, ул яҡтыны алдан күреүсе, уны балҡытыусы, юғары идеялар биреүсе. Юҡҡа ғына рус шиғриәте генийы А.С.Пушкин «Изге тойғолар мин уяттым», — тип яҙмаған. Бөгөнгө халыҡҡа мотлаҡ изгелек һәм мәрхәмәтлелектең, иманына килеүҙең рухи ҡиммәттәрен өләшер саҡ етте.

Милли үҫеште, ғорурлыҡты, башҡорт халҡының милли йөҙөн сит уҡыусыларға сығарыу бурысы ла әҙиптәргә йөкмәтелә бөгөн. Шулай уҡ прозабыҙҙың донъя әҙәбиәте аренаһына сығыу проблемаһы ла бар. Ғүмер буйы эйәреүсе геройҙар кимәлендә ҡалмай, әйҙәүсе герой типтары планкаһын да алырға ваҡыт еткәндер.

Актуаллек хаҡында һүҙ барғанда, заман темаһына яҙылған әҫәрҙәрҙе алғы планға сығарып, ә тарихи темаға ижад ителгәндәрен икенсе планда ҡуйып баһалауҙар ҙа әҙәби тәнҡит тарихында булды. Бөгөн заманға, тарихҡа ла икенсе ҡараштар системаһы эшләнә. Тарихи темаға мөрәжәғәт иткән яҙыусы (әгәр ул тарихи дөрөҫлөккә ынтылһа), үҙ заманының иң мөһим проблемаларына яуап бирә алырлыҡ яҡлауҙы алға ҡуя һәм уларҙы берәмекләп һүрәтләй. Һуңғы йылдарҙағы һүҙ азатлығы, тыйылған кәртәләрҙең юлдан алыныуы, күп нәмәләрҙе яңынан ҡарап, уның айышына төшөнөп, уға яңыса баһа биреп, яңыса асылыуы, яҙыусы күптән әйтергә йыйынған уйфекерҙәрҙең тулышыуы беҙҙең тарихи прозала үҙ сағылышын тапты.

Б.Рафиҡов венгр монахы Юлиан, Аҙнай бей («**Ахырызаман көткәндә**») характерында башҡорт һәм венгр халҡының рухи тамырҙарын, халыҡтың борондан килгән аҡылын килер быуынға еткереүсе, ғәҙеллек өсөн көрәшеүсе, ирек яулауға көрәшкә саҡырыусы мотивтарҙы яңыса формала киң панорамала аса алды.

Ә.Хәкимовтың «**Һауыр ҡумта**», «**Думбыра сыңы**» романдарындағы Юлыш, Боғара, арҙаҡлы сәсән Һабрау образдары халыҡтың тарихи яҙмышы, һуғышсан рух, мәҙәни һәм рухи байлыҡ аманатын һаҡлаусы, азатлыҡ өсөн көрәш идеяһын алға әйҙәүсе булып сығыш яһай. К.Мәргәндең «**Бөркөт ҡанаты**» әҫәрендәге Шағәле, уның улы Шаҡман, баҫҡаҡ Суртмаҡ характерынан башҡорт халҡының Рус дәүләтенә ҡушылыуын сәйәси һәм рухи планда тоҫ-

[1] Ғ.Ҡунафин. Рух асылы беҙгә бөгөн кәрәк. Ағиҙел, 1997, №5.

маллайбыҙ. Яҙыусының ижади фантазияһы аша тыуған геройҙары милли традицияларҙың заман рухында, ихтыяж һәм новаторлыҡ маһирлығында быуындар эстафетаһы булып хеҙмәт итә. Халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәшен айырым геройҙар йөҙөндә художестволы һынландырыуҙа Б.Рафиҡов «**Ҡараһаҡал**», Ғ.Хөсәйенов «**Алдар батыр ҡиссаһы**», «**Ҡанлы илле биш**», Ғ.Ибраһимов «**Кинйә**» әҫәрҙәрендә конкрет тарихи фактарға, ерле документтарға таянды. Миңлеғол Юнаев — Ҡараһаҡал, Алдар Исәкәй улы, Кинйә — заманының оло шәхестәре, үҙҙәренең ҡаһарман һәм интеллектуаль һындары менән бөгөнгө заман геройҙарының күңел донъяһы менән ныҡлы бәйләнгән. Был әҫәрҙәрҙә, бигерәк тә, «Кинйә»лә милли һыҙаттар үҙ ерлегендә биреләүе, һәр деталдең художестволы типиклашыуы көслө. Был инде халыҡтың тарихи осор үҙгәрешендә төп көс булыуына ҙур ишара. Һуңғараҡ Я.Хамматов үҙенең «**Төнъяҡ амурҙары**», Ғ.Хөсәйенов «**Пугачев фельдмаршалы**», «**Рудасы Исмәғил**» әҫәрҙәрендә башҡорт халҡының үҙаллы хоҡуҡтар алыу өсөн, илселек ҡеүәһенә ирешеү, ғилми асыштар яһау эшмәкәрлеген тормош принцибы кимәлендә тотҡан геройҙар үҙ-үҙендә ышаныс, милли аң тәрбиәләүҙәре менән бөгөнгө көнгә ауаздаш. Уларҙың аҡыл көсө, интеллектуаль өлгөргәнлеге халыҡ булмышына хас сифаттар. Әҙәбиәт белгесе С.Сафуанов һүҙҙәре менән әйткәндә, «халыҡтың мең йыллыҡ формалашыу һәм үҫеш юлын, рухи тамырҙарын конкрет образдарҙа, йәнле деталдәрҙә күрһәткән был жанрҙа — һуңғы боролошло биш-ун йылдың үҙенсәлекле ауазы ул»[1].

Яҙыусы Б.Рафиҡов тарихи прозала герой шәхесе тамырҙарын юллау йәһәтенән һуңғы йылдарҙа күп яҡлы тормоштоң ҡатмарлы мәсьәләләренә иғтибарын арттырҙы. Шиғриәт менән проза әҙипкә төрлө параллелдәрҙә ижад итергә мөмкинлектәр асты. Уның прозаһында ғүмер ағышы үткән һайын геройҙары донъяның асылын нығыраҡ аңлай, рухи матурлыҡты яһалма ҡоролмаларҙан нығыраҡ айыра бара. Яҙыусының күҙәтеүсәнлеге көслө, танып белеү ҡеүәһе төплө булды. Тәбиғәттәге һәм кешелек күңелендәге изге ниәттәр, хис матурлығы, кешеләр яҙмышының рухи бәйләнеше, тарих һәм бөгөнгөнөң нисбәтлеге әҙип әҫәрҙәрендәге геройҙарҙың хаҡлы булмышы ла. Бындай геройҙар (улар лирик, эпик, героик һәм дә фараздағымы) кешене ышандыра, уҡыусыһына тәьҫире көслө. Әҫәрҙең дә көсө шунда. Б.Рафиҡовтың «**Тауҙарҙа ҡар иртә ята**», «**Үр елдәре**» повестарындағы геройҙары замананың көнүҙәк мәсьәләләрен күтәреп сыҡты. «**Сал ҡылған**» романы бик тә фәһемле. Тарих һәм бөгөнгө, дәүерҙең ес һынланышы, ата-бабаларҙың васыятына тоғролоҡ, ғаилә шәжәрәһенә яҡын мөнәсәбәт, тәрән ихтирам, заман ваҡиғаларына үткәндәр аша баһа биреү, халыҡ рухы тамырҙарын юллау, тикшереү, аңлатыу, рухи бейеклек, уның киләһе быуынға тәьҫире көслө геройҙар аша һынлана. Б.Рафиҡовтың «Ахырызаман көткәндә», «Ҡараһаҡал», «Көнгәк» әҫәрҙәрендә донъяуи кисерештәр плеядаһы, тормош үҫеше, быуындар бәйләнеше, матди һәм рухи күсәгилешлек эҙмә-эҙ һаҡлана, геройҙар хәрәкәте төрлө яҡлап бирелә. Уның геройҙары (тарихимы, бөгөнгөмө) көн ҡаҙағына һуғып йәшәй, көрәшә, еңелә, еңә. Был тормоштағы булған драматизм ҡануундары. Шулай итеп, ижад ителгән әҫәрҙәр геройҙары үҙҙәренә генә табынып йәшәмәй, үҙенең изге маҡсатына, эшенә, эске рухына, халыҡ иманына табына.

Ләкин шулай ҙа була, тарихты һүрәтләгәндә шул тарих ерлегенә баҫырға тырышыу ҡотолғоһоҙ рәүештә фактографик йәки фотографик әҫәрҙәрҙең тыуыуына алып килә. Бындай әҫәрҙәрҙең ҡайһы берҙәре ваҡытлыса уҡымлы булһа ла, оҙон ғүмергә дәғүә итә алмай. Ә бына «Ырғыҙ», «Кәмһетелгәндәр», «Бөртөкләп йыйыла алтын», «Ай тотолған төндә», «Салауат», «Ҡыҙыл паша», «Ҡараһаҡал», «Сыбар шоңҡар», «Юғалтыуҙар һәм табыштар» әҫәрҙәре тарихи темаға яҙылһа ла, хәҙергe көндөң, беҙҙең замандың рухы менән һуғарылған. Был әҫәрҙәрҙә тарихи тәжрибә замандың социаль-тарихи процестарының актив йоғонтоһонда, халыҡтың күңел ихтыяжын тойоп, дәүерҙең эстетик һәм әхлаҡи аң кимәле юғарылығынан тороп үҙләштерелгән. Беҙ был әҫәрҙәрҙе уҡып, халыҡтың иң боронғо йәшәү сығанаҡтарынан азатлыҡ өсөн көрәштә яулаған еңеүҙәрҙе килтергән актив шәхесте, ер йөҙөндә фашист илбаҫарҙарын тар-мар иткән ил һаҡсыһын һәм бөгөнгө ауыр тормошта үҙ урынын эҙләгән көрәшсе кеше — замандашыбыҙ концепцияһын күрәбеҙ. Б.Рафиҡовтың «Ҡараһаҡал» романындағы төп герой асылы ла шунан ғибәрәт. Башҡорт ерҙәрен тартып алыусыларға ҡаршы ҡорал тотоп, ирек дауларға күтәрелгән реаль герой, халыҡ араһында Ҡараһаҡал батыр исеме менән танылған, үҙ заманының уҡымышлы шәхесе Хажи Миңлеғол Юнаев образы һынлана. Ҡараһаҡалдың рухи үҫеше халыҡ менән, етәкләгән ғәскәре менән бер-

[1] С.Сафуанов. Яңырыу юлында. Өфө, 1994. «Боролошло йылдар ауазы» мәҡәләһе, 53-сө бит.

гә үҫә. Тарих, халыҡ яҙмышы, үткәнгә, хәҙергегә, киләсәккә синтезланып, әҫәр геройының күңел донъяһы аша үтә.

«Көнгәк» романындағы башҡорт һәм венгр халыҡтарының уртаҡ яҙмышын тасуирлаған һәм үҙ характерҙарында дөйөмләштергән юрматы батыры Йәшен, мадьяр һылыуы Әмәшә, мадьяр батыры Үгәк, Барса батыр, ырыу һаҡсыһы Юламан образдары аша күрәбеҙ. Әҫәрҙә әҙәби тип булараҡ, ҡанбаба Юламан образы уңышлы ижад ителгән. Ул аҡыл эйәһе, ике халыҡ яҙмышын бизмәнгә һалыусы, ҡурсалаусы, үҙ ырыуын үҫтереүсе. Яҙыусы Юламандың рухи донъяһын эске көрәш хәрәкәте аша аса. Геройҙың эске матурлығы көслө ихтыярлы ир уҙамандарына ғына хас иманына камил килеүе, тормош тәжрибәһе, ғилеме уның бөтөнлөгөн тәшкил итә. Алмуш-Алмастың Юламан тәрбиәһендә үҫеүе, уның артабанғы ҡылығы ла, ике милләт ҡанынан формалашҡан характеры ла ышандырырлыҡ көскә эйә. Мадьяр халҡының Алмуш хан байрағы аҫтында үҙ Ватанын эҙләп көнбайышҡа юлланыуын беҙ тәбиғи ҡабул итәбеҙ.

Романда Әмәшә — әсә образы бөтә ҡатмарлығында асыла. Уның Үгәк хандағы аяныслы яҙмышы тетрәткес эпизодтарҙа бирелә. Әмәшә ул замандағы ҡатын-ҡыҙҙар өлөшөнә төшкән фажиғә ҡорбаны ла, ырыуы өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер тороусы ханша ла. Тереләй күмелгән Барса батырҙың ҡәберҙән сығыуы, уның артабанғы һоҡланғыс та, ҡыҙғаныс та тормошо әҙип тарафынан оҫта тасуирланған. Тарихи романда Көнгәк буйындағы мадьяр иле, юрматыларҙың ут күршеләре бөрйәндәрҙең көнкүреше киң панорамала асылыуы геройҙарҙың хәрәкәт динамикаһын көсәйтә, сюжет үҫешенең көсөргәнешле моментына килтерә.

Булат Рафиҡов үҙенең «Көнгәк» романында геройҙарҙың тормошондағы көрәш юлын әхлаҡи принциптарға ҡора, образдар — героик натуралы, бай рухлы, асыҡ күңелле, халҡы, ере өсөн йәнен фиҙа ҡылыусылар. Романды уҡып сыҡҡас, шәхси һөйөнөсөндөң милләт һөйөнөсө менән берегеүе, күңелендәге хис байрамы, рухи күтәренкелектең хис гармонияһы менән ауаздаш булыуы менән мөһим. Булат Рафиҡов үҙенең «Ҡараһаҡал», «Ахырызаман көткәндә» әҫәрҙәрендә лә тарих менән әҙәбиәт геройының һуңғы ваҡытта йыш ҡына үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә булып бер мөхитте тәшкил итеүен, милләттәштәребеҙҙең бөгөнгө көндәге художестволы-эстетик кимәлен, үҫешен, хәҙерге герой концепцияһы камиллығын билдәләй. Был һуңғы осорҙа яҙыусылар ижадында милләт тарихын ысын художниктарса үҙләштереүҙән, өйрәнеүҙән, юғары художестволы кәүҙәләндереүҙән килә. Ҙур әҙәби тәжрибә генә ҙур геройҙы тыуҙырырға һәләтле. Яҙыусы романдары түбәндәге талаптарға тап килә, йәғни, уның геройҙарынан милләт характерын, заман һулышын тоябыҙ, герой йөҙөндә тарихи булмышыбыҙҙы күрәбеҙ.

Осорҙоң демократлашыуы, рухи азатлыҡты ауыҙлыҡлаған төрлө кире күренештәрҙең ихтыяж тарафынан еңелә барыуы прозаиктарҙы тәрән уйланырға мәжбүр итте. Улар күп нәмәләрҙе яңынан ҡарап, яңыса баһалау юлында. Һуңғы йылдарҙағы йәмғиәттәге киҫкен үҙгәрештәр, рухи һынылыштар яҙыусыны әҙәби материалға заман талабы аша ҡарарға, анализ яһарға саҡырҙы. Р.Байымовтың «Сыбар шоңҡар» романы был йәһәттән ошо ҡанундар нигеҙендә тыуған әҫәр.

Әҫәрҙең төп геройы — арҙаҡлы дәүләт эшмәкәре, ғалим Әхмәтзәки Вәлиди Туған.

Данлыҡлы Карауанһарай төрлө тарафтарҙан килгән илселәрҙең күтәренке кәйеф, көр тауыштары, ҡурай моңо менән тулған. Яҙыусы төп геройҙы үҙәк эпизодтар уртаһында ҡайната. Башҡорт Мәркәз шура ағзаһы Муллайән Халиков, Ялан кантоны Тәңрекүлдән Ғәлимйән Тағановтарҙың бейеү тамашаһы, Шәйехзада Бабичтың һөйләгән «күн ҡата» мәрәкәһе уҡыусыны әҫәрҙең тығыҙ ваҡиғалар ағышына алып инеп китә. Үтәсәк ҡоролтай, мөхтәриәт яҙмышы тураһында борсолған Әхмәтзәки Вәлиди һәр кемгә иғтибарлы.

Ҡоролтай үтәсәк зал вәкилдәр менән тулған. Улар төрлө ҡатлам кешеләре. Төлкө тун, ҡама бүрекле түрәләр, Арғаяш байҙары Әбделхәй Ҡорбанғәлиев, Минһаждар, улар янында Шәриф Манатов бәхәс ҡора. Фронт юлдарын үтеп килгән шинелле һалдаттар, ҡыптыр тун, бишмәтле вәкилдәр арыраҡ урын алған. Ошонда тасуирлау ҡеүәһе яҙыусының оҫталығын күрһәтә. Күп һүҙ сурытмай, социаль ҡатламдар араһындағы эске көсөргәнешлекте бирә. Алдағы көрәш картиналары пәйҙә була. Зәки Вәлиди, залдағы вәкилдәрҙе күҙ уңында тотоп, төрлө уйҙар йомғағын сисә. Мәркәз шурала эске һәм хәрби эштәргә яуаплы булараҡ, уның ышанысы — уҡымышлы йәштәр һәм ошо шинелле һалдаттар, улар араһында — Харис Йомағолов. Уҡымышлы, башҡорт рухлы, тарихты яҡшы белә. Харис Йомағоловты хөкүмәт ағзаһы итеү уйында Зәки Вәлиди. «Барлыҡ башҡорттарҙың ойоштороу ҡоролтайы» Башҡортостан мөхтәриәтен раҫлау менән бергә, Зәки Вәлиди милли ғәскәр төҙөү тураһында ла уйлана. «Русия Федерацияһы һәм Башҡортостандың уға мөнәсәбәте», «Баш-

ҡортостан менән үҙаллы идара итеүҙе тормошҡа ашырыуҙа тәүге саралар» ҡоролтайҙың көн тәртибенә ҡуйылған. Шундай көсөргәнешле, мосолмандарҙың берҙәмлек яҙмышы ҡыл өҫтөндә торған мәлдә яҙыусы Р.Байымов күңел төбөнән сыҡҡан һүҙ көсөнөң ғәйәт илаһилығын тотоп ала. Башҡорттарҙың борон-борондан яулы ихтилалдарҙа үҙ етәксеһе, йырсы-сәсәне булған. Һабрау сәсән, Ҡарас сәсән, Салауат... Шәйехзада Бабичтың бында ысын мәғәнәһендә милли инҡилап йырсыһы икәнлеге күрһәтелә. Ошо эпизод-һүҙ ҡомары аша Зәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич һәм дә Ҡоролтай илселәренең рухи берҙәмлеген күп мәртәбәләргә арттырып ебәрә.

Ҡоролтай барышында яҙыусы иле, шәхесенә булған мөнәсәбәт аша ил яҙмышын хәл итеүселәрҙең ысын йөҙөн асыуҙа башҡорттоң ололау йолаһы — бүләкләү ғәҙәтен оҫта ҡуллана. Халыҡ ышанысын яулаған Әхмәтзәки Вәлиди һәм Шәриф Манатовты ололау эпизоды кемдең кем икәнлегенә аҡыллы ишара. Туҡсоран кантоны башҡорттарының Зәки Вәлидигә ата-бабаларҙан ҡалған йола буйынса батырҙар бүләге — эйәрле саптар ат бүләк итеүендә ҙур фәлсәфәүи һәм сәйәси мәғәнә һалынған. Халыҡ етәксеһен аяуһыҙ көрәш юлы көтә.

Күбәләк-Тиләү волосынан килгән унтер-офицер Муса Мортазиндың ҡыйыу сығышына ла ҡолаҡ һала Зәки Вәлиди.

Шау-шыулы Ҡоролтай теләгенә ирешә. «Милли берҙәмлек» программаһы, ер мәсьәләһе күпселек тауыштан ыңғай хәл ителә һәм абруйлы кешеләрҙән хөкүмәт төҙөлә. Мәркәз шура иғлан иткән Башҡортостан мөхтәриәтен раҫлау мәсьәләһе лә еңеп сыға. «Йәшәһен ирекле Башҡортостан!» ашҡыныулы ауаздары Караванһарайҙы тетрәтә.

Ләкин азатлыҡ өсөн көрәштең ни тиклем ауыр буласағын, күпме ҡан көҫәлгәнен әле берәү ҙә тоҫмаллай алмай. Зәки Вәлиди «Башҡорт ғәскәри идараһы»на ярҙамсы итеп ротмистр Әмир Ҡарамышевты билдәләй. Р.Байымов, образдар үҫәгилешлеген ҡеүәтләп, Әмир Ҡарамышевтың портретын бирә. Романдағы шәхестәр йөҙөндә беҙ тарихи логиканы асыҡ күрәбеҙ, ул да булһа, үҙ халҡына ғына хас тормошсан тәбиғилек ярылып ята. Геройҙар көрәше тарихи-социаль ҡаршылыҡтарҙа, уның утлы өйөрмәләрендә, зиһен бәхәстәрендә сыныға.

Р.Байымов «Сыбар шоңҡар» әҫәрен Башҡортостан Республикаһының яҙмышын хәл итеүҙә тарихта иң мөһим роль уйнаған Ҡоролтайҙа Зәки Вәлиди һәм уның көрәштәштәре эшмәкәрлегенән башлауында замандың интеллектуаль идеяһы һалынған. Роман композицияһы өсөн был уңышлы алым, сөнки күҙ алдына килерҙәй колоритлы панорама геройҙары характерының тулы сағылышына был берҙән-бер юлдыр.

Ваҡиғалар үҫтерелешенең тағы ла документаль яҡтан камиллашыуы, художестволы бөтөнлөккә ынтылыуы эпизодтарҙы һығылмалы динамикаға солғай, үҙәк образдарҙың тарихи майҙандағы үҙ баһаһын белеп, ҡылыҡтары аша, замана үҙенсәлеген, уның нескәлектәрен тойоп һынланыуы әҫәрҙә бермә-бер идея-эстетик ҡанундарҙың өҫтөнлөк итеүенә булышлыҡ итә. Романдағы һәр деталь, эпизод — ул ҡоролтай барышымы, ғәскәрҙәр араһындағы көсөргәнешле бәрелештәрме, геройҙарҙың эске монологы булһынмы, йәиһә хөкүмәт күләмендәге шәхестәрҙең рухи һәм хәрәкәт алыштарымы — яҙыусы тарафынан бер композицион бөтөнлөккә буйһондоролған. Әҫәр һәм уның геройҙары хаҡында иң инандырғаны — милләт яҙмышы өсөн ғүмерен упҡын ситенә ҡуйған, көслө ихтыярлы Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың бығаса бөгөнгө художестволы әҙәбиәттә күрелмәгән юғары һүҙ маһирлығында шәхес — образ кимәленә күтәрелеүе булһа, икенсеһе — бөгөн дә иң мөһим проблемаларҙың береһе — Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының үҙаллылығы өсөн көрәштә романда күтәрелгән республика мөхтәриәтенең актуаллеге. Оло шәхес, дәүләт эшмәкәре, арҙаҡлы ғалим Зәки Вәлиди көрәше Ырымбур, Башҡортостан, Мәскәү менән генә сикләнмәй, бәлки ҡәрҙәш һаналған Урта Азия, Төркиә тарафтарына барып тоташа. Яҙыусының был тәңгәлдә ғалим булараҡ та тарихты яҡшы белеүе, һәр ваҡиғаны тарихи-документаль яҡтан барлауы, ҡоро факттар аша түгел, ә художество йәһәтенән уҡымлы итеп тасуирлауы романды юғары баҫҡысҡа күтәрә. Р.Байымов Зәки Вәлиди образын тулы, милли ерлектә асыуҙа әҫәрҙең төп ваҡиғалар үҫешендә ҡайнаусы Әмир Ҡарамыш, Муса Мортазин, хөкүмәт рәйесе Юныс Бикбов, Абдулла Мирасов, Абдулла Иҙелбаев, Ғимран Мағазов, Мөхтәр Ҡарамышев, Шаһшәриф Мәжитов, Мәскәү большевиктары Владимир Ленин, Иосиф Сталин, Шәриф Манатов, Мулланур Вахитов, Лев Троцкий, Михаил Фрунзе образдарында тарихи ысынбарлыҡ күсәгилешлеген ижади файҙалана. Ул бөгөнгө заман ҡапҡаһын, рух донъяһын асыуҙа етди алым менән эш итә. Характерҙарҙы асыуҙа әҙәби ялтырауыҡ юҡ, аҡыл төбөнән мөрәжәғәт һүҙе һәр геройҙың булмышын тәшкил итә. Зәки Вәлидиҙең милли ғәскәр төҙөү маҡсатында Баймаҡ районы Темәс, Учалы яҡтарында, Миәс тарафтарында булыуы, төҙөлөп ятҡан ғәскәрҙәр, уларҙың

башлыҡтары менән осрашыуы, кәңәш ҡороуы бай сюжет материалдарынан тора. Ҡыҙылдар менән бәрелештә беҙ геройҙың Дутов, Николай һәм Иван Кашириндар, Василий Блюхер, яу барышында ярһыу мортазинсылар менән осрашыуы, кәңәш ҡороуы уны ҙур ойоштороусы баҫҡысына күтәрә. Зәки Вәлидиҙең төрмәлә тотҡонда ултырғанда ла был шәхестең ни тиклем көслө рухлы, абруйлы булыуы, үлемгә барғанда ла ғилем ҡәләмен ташламауы инандыра.

Романда Шәйехзада Бабич образы бермә-бер төп шәхес — геройға рухи үҫештә бәйләнгән. Был бигерәк тә ике шәхестең эске рухи берҙәмлегендә сағыла. Зәки Вәлидиҙең эске донъяһын яҙыусы халыҡтың рухи байлығы аша асып бирә. Ауылдашы Аҫылбайҙы осратыуы, уның моңло тауышын ишетеүе Зәкиҙе балалыҡ йылдарына, Көҙән ауылына алып китә, берсә ул һығылып сыҡҡан ҡурай моңо аша халҡының ҡаһарманлығына һоҡлана.

Әҫәрҙә төп геройҙың шәхси тормошон фронт шарттарында кәүҙәләндереү — уңышлы алымдарҙың береһе. Автор геройҙың бай кисерештәр донъяһын уның мөхәббәте, һуңынан хәләл ефете, яуҙаш ҡатыны Әбйәлил ҡыҙы Нәфисә образы аша асыуы отошло психологик алым. Нәфисәнең ата-әсәһенең тышҡы һәм эске күркәмлеге, тыйнаҡлығы, Хажимөхәмәттең киң мәғлүмәтле, инсафлы, яҡты күңелле кеше булыуы ла геройҙың бөтөнлөгөнә илтә. Ил яҙмышын хәл итеүсе шәхестәрҙең дә төрлө булыуы, сыбар булыуы хаҡында Хажимөхәмәт мулланың сәйәси томандар эсендә кемдең кем икәнлеген төҫмөрләргә тырышыуы ла ғәҙәти. Төрлө сыбар шоңҡарҙар даирәһендә Зәки Вәлиди шәхес булараҡ автор тарафынан юғары сөйөлә. Бай фактлы материалдар ҡулланыу, геройҙың күңел хәрәкәте менән оҫта идара итеү, тарихи дөрөҫлөккә интеллектуаль зиһен менән яҡын килеү, заман талабында анализлау — герой концепцияһын үҫтереүҙә новаторлыҡ алымдары ул.

Билдәле булыуынса, бынан алтмыш йылдар элек донъя күргән художестволы әҙәбиәттә Зәки Вәлиди образы милләтсе, системаға ҡаршы тороусы ҡара көс, комик ҡиәфәттә төҫмөрләнә килде. «Сыбар шоңҡар» әҫәре, әлегә тиклем ҡоролған пәрҙәләрҙе асып, легендар шәхесебеҙ йөҙөнә, уның рухи донъяһына яҡтылыҡ бирҙе. Мәскәү әһелдәренең милли хәрәкәтте, үҙаллылыҡты юҡ итеү йәһәтенән Зәки Вәлидиҙе үҙәккә эшкә алыуы республика өсөн ысын фажиғәгә әйләнеүен яҙыусы алдан уҡ сәйәси хыянат икәнен фашлай. Башҡортостанға ҡара көндәр килә, башревкомсыларҙы эҙәрлекләү башлана. Зәки Вәлидиҙең яуҙашы Алкин да Караванһарай мәсетендә аҫылына. Советтарҙың хыянатсыл эшмәкәрлегенә түҙә алмай ул. Әхмәтзәки Вәлидигә лә үлем сираты яҡынлай. Ваҡиғаларҙың кульминацион нөктәһенә килеүҙә автор уның эске законлыҡтарын, йәиһә геройҙың хәл иткес аҙымын яһауҙағы тәүәккәллеген дә, үҙенең әхлаҡи ҡарашын да объектив белдерә алған. Уның сит илгә сығып китер алдынан: «Милләт эшенә тоғро булығыҙ. Яҙған булһа, осрашырбыҙ әле тағы ла», — тигән хушлашыу һүҙҙәре уҡыусыны тетрәндерә. «Русия, Башҡортостан артта ҡалды, хуш, бәхил бул, илгенәм!». Ошо ерҙә Р.Байымов бик көслө эпизодик һүрәтләмә бирә. «...Нисек кенә ауыр булмаһын, Зәки Вәлиди артына боролоп ҡараманы. Белә ул: барыбер ҡайтасаҡ. Халыҡ йәшәһә, милләттең азатлыҡ рухы үлмәһә — мотлаҡ, ниндәй генә рәүештә булһа ла ҡайтасаҡ... Аҡ шоңҡарҙар иреклеген татыған ир-уҙамандар ҡурҡаҡ һаҙ тәлмәрйене һымаҡ, тынсыу ерҙә боҫоп ятмаҫ, Ҡараһаҡалдар, Батыршалар, Салауаттар эҙенән ирек даулап, ғорур шоңҡар булып тағы ла юғарыға кәйелер. Бына шул саҡ халыҡҡа Әхмәтзәки үҙе лә ҡайтып төшөр...»

Әйе, бихисап йылдарҙан һуң, ҡанлы һуғыш, сәйәси дауыл-өйөрмәләр аша алыҫ-алыҫ яҡтарҙан Сыбар шоңҡарға ла үҙ иленә әйләнеп ҡайтырға насип булды. Үҙе ҡайта алманы, уның күкрәп сәскә атҡан даншөһрәте, моң даръяһына күмелгән изге күңеле, төрлө ҡитғаларҙы аша сыҡҡан ғилем донъяһы, бөйөк аманат булып, Башҡортостанына ҡайтты. Башҡорт иле суверенитетын яулаған, әлеге көндә лә үҙаллылыҡ, туған тел күрке, юғары милли мәҙәниәт, республика халҡының мәңгелек дуҫлығы өсөн ауыр көрәш осоронда Сыбар шоңҡарҙың рухи бөйөклөгөнөң иленә ҡайтарылыуы — ижади асыш. Р.Байымов үҙенең документаль романында халҡыбыҙҙың оло шәхесе образын беренселәрҙән булып типиклаштырҙы. Зәки Вәлиди сәйәси көрәш ҡаршылыҡтары аша интеллектуаль героик шәхес баҫҡысына күтәрелде.

Әҙиптең төпсөн күҙәтеүсәнлеге, тормошто яҡшы белеүе, геройҙар характерын төрлө яҡлап асыуы, күтәрелгән проблемаларҙың яңылығы, тарих һәм бөгөнгөнөң бәйләнеше, күсәгилешлеге ныҡ отошло. Авторҙың «Сыбар шоңҡар»ы ваҡиғаларҙың тығыҙлығы, күп һыҙлектән ҡотолоу, композицион камиллығы, фәлсәфәүи мәғәнәнең диалектик фекер менән берлеге, геройшәхестең ситуацияларҙы (хәл-ваҡиғаларҙы) үҙе ойоштороуына килтерә. Әҫәрҙәге яңы типтағы тарихи шәхес Зәки Вәлиди йөҙөндә беҙ ысын мәғәнәһендә милләт асылын күрәбеҙ.